# «Арт-Книго-Фест» асыҡ китап фестивале гөрләне!

**Төрлө китаптар...Әкиәт геройҙары... Былар барыһы ла китап фестивалендә булды. Стәрлетамаҡ калаһының тарихи өлөшөндә йыл һайын ойошторолған «Арт-Книго-Фест» асыҡ китап фестивале үҙе үк шулай ҡыҙыҡлы китап һымаҡ үтте. Быйыл был сараға 5 йәш тулды.**




**Йәш быуындың шиғриәткә ынтылыуы - ҡыуаныслы күренеш!**

Фестиваль ҡунаҡтарын һәм ойоштороусыларҙы ошондай ваҡиға менән ҡотларға Стәрлетамаҡ хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге начальнигы Зөфәр Зиннәтуллин һәм ҡала Советы депутаты Әлфиә Әсфәндиәрова килде. «Салауат» кинокомплексы алдындағы майҙанда ҡала халҡы өсөн традицион һәм бөтөнләй яңы 7 тематик майҙансыҡ




**«Ашҡаҙар»ҙар ҙа әүҙем ҡатнашты.**

ойошторолдо. Мәҫәлән, «үләндәге йорт» майҙансығында саф һауала китаптарҙы уҡырға, «Буккросинг Стәрлетамаҡтарса» акцияһында ҡатнашырға, «ЛитРес» электрон китапханаһына яҙылырға һәм «Пушкин картаһын» рәсмиләштерергә мөмкин ине. Китап йәрминкәһендә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең китаптары һатыуға сыҡты, шулай уҡ Республика һуҡырҙар өсөн махсус китапхананың Стәрлетамаҡ филиалында күргәҙмә һәм оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо.

Химик шоу, балалар өсөн интерактив күргәҙмәләрҙе «Менделеев-лаб.», «Ньютон-лаб.» һәм «Дарвин-лаб.» мауыҡтырғыс фәндәр үҙәктәре тәҡдим итте. Йәш тамашасылар төрлө тәжрибәләрҙә ҡатнаша алды, тағы ла твистер, домино йәки дженгу уйындарын уйнаны.

Йола буйынса, әлбиттә, «Арт-Книго-Фест» та шиғри майҙансыҡ эшләне, унда Стәрлетамаҡ шағирҙары һәм яҙыусылары, «РокСтрок» һәм «СтеЛит» ижади берекмәләре вәкилдәре сығыш яһаны.

Сәнғәт аллеяһында лә төрлө оҫталыҡ кластары ойошторолдо. Ошонда уҡ сәнғәт буйынса китаптар күргәҙмәһе, «Китап. Яңы ҡараш» рәсемдәр конкурсы эштәренән күргәҙмә ойошторолдо.

Фестивалдә береүҙәр башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм көнкүреше менән танышып, башҡорт аш-һыуын тәмләп ҡараһа, икенселәре «Ашҡаҙар» гәзите хеҙмәткәрҙәре ойошторған викторинала ҡатнашып, бүләктәр ҙә отоп өлгөрҙө. Улай ғына ла түгел, беҙҙән балаларға тәмлекәстәр ҙә таратылды. Фестиваль Елена Калюжная етәкселегендәге Үҙәк китапхана систе-маһы тарафынан юғары кимәлдә ойошторолдо.

**ҺҮҘ ҠАТНАШЫУСЫЛАРҒА:**

**Гөлназ ХУЖАХМӘТОВА,**

*– Йыл да китап фестиваленә килергә тырышам. «Ашҡаҙар» гәзите үткәргән викторинала ҡатнашып, гәзиттең үткәне менән танышып сыҡтыҡ, бик мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡ булды. Йәштәргә шуны әйткем килә, башҡорт телендә баҫылған гәзитебеҙҙе алдырһындар, уҡыһындар, ҡалабыҙҙың хәбәрҙәре, кешеләре менән танышып барһындар. "Ашҡаҙарҙар"ға уңыштар теләйем!*

**Гөлкәй ҠЫУАТОВА.**

**Э. ФӘТТӘХОВ фотоһы һәм асыҡ сығанаҡтарҙан алынды.**